# Шәйехзада Бабич

ملا محمد ذاکر اوغلی

شیخ زاده بابیچ

(شبشه)

Авторы һәм төҙөүсеһе
РАУИЛ БИКБАЕВ

Биҙәүсеһе — ВАСИЛИЙ КОВАЛЕВ
Макет авторҙары — ВАСИЛИЙ КОВАЛЕВ,
ЗӘЙТҮНӘ СЫҢҒЫҘОВА

Альбомда НАИЛ ҒӘЛИЕВТЕҢ фото эштәре (слайдтар, фотографиялар, фоторепродукциялар) файҙаланылды.

Автор и составитель
РАВИЛЬ БИКБАЕВ

Художественное оформление
ВАСИЛИЯ КОВАЛЕВА

Авторы макета — ВАСИЛИЙ КОВАЛЕВ,
ЗАЙТУНА ЧИНГИЗОВА

Перевод произведений ШАЙХЗАДЫ БАБИЧА
с башкирского С. ЛИПКИНА и Г. ШАФИКОВА

В альбоме использованы фотоработы
(слайды, фотографии, фоторепродукции)
НАИЛЯ ГАЛЕЕВА.

# ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧ

(1895-1919)

ӨФӨ
«КИТАП»
1995

УФА
«КИТАП»
1995



Буйға еткәс тә юғалттым мин ҡояшымды кинәт,
Тик был көндәрҙә түбәмдә тапҡа сумған ай йөрөй.

...Ә хәҙер күңелем минең боҙҙай туңып, таштай ҡата,
Сөнки йөрөгән ерҙәрем тик ҡап-ҡара Турғай ере.

Возмужав, свое солнце неожиданно я потерял,
В эти дни над моей головой лишь запятнанная луна.

...Сейчас моя душа стынет, как лед, грубеет, как камень.
Меня кругом окружает черная тургайская земля.

Ваҡыт тигәндәре бер кемде лә, бер нәмәне лә аямай. Ләкин аҫыл улдары ҡалдырған яҡты эҙҙе халыҡ күңеленән ваҡыт ағышы юйып ташлай алмай, киреһенсә, йылдар үткән һайын был ғали йәндәр ҡалдырып киткән нурҙар күңелгә ғәзизерәк була бара. Атаҡлы башҡорт шағиры Шәйехзада Бабич — бына шундай бөйөк шәхестәрҙең береһе.
Егермense быуат башындағы әҙәбиәттә генә түгел, башҡорт шиғриәтенең барлыҡ үҫеш тарихында Шәйехзада Бабич әҫәрҙәре күренекле урын алып тора. Уның ижад юлы асылда ун йылдан да кәмерәк араны биләне һәм матбуғатта даими күренгән сағы дүрт-биш йылдан артманы.
Был фани донъяларҙа ни бары егерме дүрт йәш йәшәгән, боронғолар иҫәбе буйынса, ике мөсәл ғүмер кисергән Бабичтың шиғырҙары, балладалары, эпиграммалары, фельетондары, сәхнә эшмәкәрлеге, яугирлығы милләтебеҙҙең рухи донъяһында оло тарихи ваҡиғаларға әйләнде. Тәүге әҫәрҙәренән үк уның шиғриәте башҡорт ерлегенә тамырланып ҡалҡты һәм был бәйләнеш нығыраҡ тәрәнәйә барҙы.
Дәһшәтле йылдарҙа йәшәгән, көрәшкән һәм ижад иткән ярһыу шағирҙың ижадын аңлау еңел түгел. Үҙенсәлекле шағир булыу менән бергә, Шәйехзада ғәжәп ҡыҙыҡлы шәхес тә ине. Халыҡ араһында Бабич ижадына, айырыуса уның шәхси тормошона, холоҡ-ҡылығына бәйле байтаҡ риүәйәттәр тыуған, үҙе тере сағында уҡ шағир ниндәйҙер легендар шәхескә әйләнгән. Тыумыштан сәсән булған Бабич берәүҙәрҙең хәтерендә еңелсә мәҙәк оҫтаһы, сәхнәнән көлдөрөүсе ҡарпыш ҡолаҡлы кәмит булып ҡалған; икенселәр өсөн ул ғәҙелһеҙлекте, тигеҙһеҙлекте фашлаусы әсе телле сатирик; өсөнсөләргә иһә Ләйләһе алдында баш эйгән Мәжнүн, мөхәббәт утында яныусы саф күңелле хыялый; дүртенселәргә ул милләтсе һәм халыҡ дошманы; бишенселәргә ул шағир — туған халҡын яҡтылыҡҡа әйҙәүсе ил улы, көрәшсе егет һ. б.
Шулай ҙа кем һуң ул шағир Шәйехзада Бабич?
Был хаҡта уйланып, байтаҡ замандаштары шағир хаҡында иҫтәлектәр яҙып ҡалдырған. Ошо һорауға яуап эҙләп, ғалимдар махсус тикшеренеүҙәр үткәргән, Шәйехзада Бабич шиғриәтенең серҙәрен өйрәнгән. Беҙ һеҙҙе, хөрмәтле уҡыусылар, ошо тылсымлы донъяға яңы сәйәхәткә саҡырабыҙ.

Время не щадит никого и ничего. Но светлый след, оставленный яркими личностями в благодарной памяти народа, не в силах стереть даже время, наоборот, с годами их имена становятся все дороже и сокровеннее. Вот к таким великим личностям относится знаменитый башкирский поэт Шайхзада Бабич. Произведения Шайхзады Бабича занимают выдающееся место не только в литературе начала двадцатого века, но и во всей истории развития башкирской поэзии. Его творческий путь продолжался менее десяти лет, произведения поэта публиковались в печати в течение всего четырех-пяти лет. Прожил Шайхзада Бабич в этом бренном мире двадцать четыре года, или две мусели по двенадцатилетнему восточному календарю. Но его стихи, баллады, эпиграммы, фельетоны, сценическая деятельность стали историческим событием в духовной жизни нации. Первые же его произведения свидетельствуют об их неразрывной связи с башкирской действительностью и чем дальше, тем больше крепли эти глубокие корни. Огромна заслуга талантливого поэта в том, что он поднял на новую высоту искусство слова, обогатил идейно-эстетическое содержание башкирской поэзии, незабываемы его заслуги в дальнейшем развитии поэтического мастерства.
Нелегко понять творчество поэта, жившего и боровшегося в грозные годы, которыми начался двадцатый век. Своеобразнейший поэт, он вместе с тем был удивительной личностью. Еще при жизни о Бабиче ходили легенды, связанные с его творчеством и личностью. Рожденный сэсэном, Бабич в памяти одних остался мастером-юмористом, острословом, у других — сатириком, бичевавшим несправедливость, у третьих — мечтателем, Меджнуном, изнемогающим от любви к своей Лейле, у четвертых — националистом и врагом народа, у пятых — верным сыном своей нации, борцом, звавшим людей к правде и свету.
Так кем же все-таки был поэт Шайхзада Бабич?
Думая об этом, многие его современники оставили о нем свои воспоминания. Пытаясь ответить на этот вопрос, многие ученые писали специальные исследования, изучали тайны поэзии Бабича. Мы вас, уважаемые читатели, приглашаем в новое путешествие в этот волшебный мир.

1895 йыл Мөхәмәтзакир мулланың йортонда ҡот-ҡыуаныс менән башланып китә: ғинуарҙың икеһендә был йортта ир бала донъяға килә. Йөҙләк менән тыуа был сабый. Яҙмыш уға яҡты донъяла, әйтерһең дә, тәүге һулыш алыуынан уҡ аҡ бәхеттәр генә юрап тора. Бәхет билдәһе булған йөҙләк менән тыуған был балаға Шәйехзада тип исем ҡушалар.
Халыҡ тормошондағы бәхетле мәлдәр, йөҙ йылдарға бер була торған илаһи сәғәттәр! Тыныс ҡына таң ҡаршылаған Әсән ауылы ла, апаҡ бәҫкә күмелгән туғай-яландар ҙа, уйға сумған алыҫтағы Урал армыттары ла был илаһи таңда башҡорт еренә ниндәй оло бәхет килгәнен, милләттең күҙ ҡараһы, йөрәк парәһе, йәненең киҫәге буласаҡ аҫыл заттың тыуғанын белмәй әле.
1895 йылдың икенсе (ун бишенсе) ғинуарында Әсән ауылында донъяға килгән ошо изге йән — башҡорттоң буласаҡ бөйөк шағиры Шәйехзада Бабич үҙе лә арҙаҡлы, затлы нәҫелдән. Һүҙ бында ниндәйҙер байлыҡ йәки аҡһөйәклек тураһында бармай. Бабичтар ғүмер буйы тир түгеп, хәләл эш менән көн күргәндәр, илдерҙе ҡурсалап, быуын-быуын хәрби хеҙмәттә булғандар, дошманды ҡыуып, яу сапҡандар. Ҡулына ҡылыс тотоп, Ил һаҡлағандары ла, ҡулына ҡәләм алып, Илгә ғилем таратҡандары ла күп булған уларҙың. Нисек кенә ғүмер кисермәһендәр, Бабичтар затлы нәҫелдән, күңелдәрендә һәр саҡ иман нуры, мәғрифәт яҡтылығы балҡып торған, ҡараштарынан миһырбанлыҡ, мөрәүәт бөркөлөп торған затлы нәҫелдән. Был затлы нәҫелдең быуаттар төпкөлөнән башҡорт тупрағына тамырланып үҫкән, дыуан ырыуының аҫабаларына барып тоташҡан шәжәрә ағасының бер тармағы: Бәбес олатай — уның улы Мөхтәр — уның улы Ишбулды — уның улы Ғилуан — уның улы Мөхәмәтзакир буйлап Шәйехзадаға килеп тоташа. Бәбес олатаһының улдары, ейәндәре, бүләрҙәре араһында поход есаулы ла, зауряд-есаул да, зауряд-сотник та, поход старшинаһы ла, указлы муллалар ҙа булған. 1888 йылдан Әсән ауылында икенсе мәхәлләлә мулла булып торған Мөхәмәтзакир Бабичевтың атайолатайҙары Тартыш, Ҡыйғаҙытамаҡ, Шаҙы ауылдарында ғүмер һөргән.
Әле сәңгелдәктә сағында уҡ Шәйехзаданың күңеленә китап нуры төшкән. Мөхәмәтзакир мулланың күп балалы татыу ғаиләһе йәшәгән өйҙә китап һәр саҡ иң ҡәҙерле байлыҡ булған, әле 1905 йылға тиклем үк был йортҡа китап, гәзит килеп торған. Халыҡҡа аң-белем илтеүсе мулланы ҡотҡо таратыуҙа ғәйепләп, бер заман уның указын тартып алалар. Ауылдаштарының бер төптән яҡлап сығыуынан һуң ғына уға указын кире ҡайтарып бирәләр. Бәләкәстән үк уҡыуға бик зирәк булған Шәйехзаданың күңелендә тәбиғәттән бирелгән ижад дәрте китап нуры төшкән был йортта бик иртә уяна. Уның 1912 йылда төҙөлөп тә матбуғатҡа сыға алмай ҡалған ҡульяҙма йыйынтығы «Эй, китап» тигән шиғыр менән асылып китә. «Эй, китап» тигән инаныу менән ҡулына ҡәләм алған йәш шағирҙың тәүге әҫәрҙәрендә үк ғилем яҡтыһы менән наҙанлыҡтың ҡара күләгәһе килеп бәрелешә.
Тарихта әллә ниндәй тап килеүҙәр бар. Бына шуларҙың береһе: Мифтахетдин Аҡмулланың үлгән йылы Шәйехзада Бабич тыуған йыл. «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!» тип оран һалған Аҡмулла өсөн аң-белем ни тиклем ҡәҙерле булһа, Бабич та шул уҡ дәрәжәлә мәғрифәткә табынып ижадҡа килә. Ул, алдындағы хазинаның тамсыһын да ситкә ҡалдырмай, үҙенә тиклем тупланған барлыҡ байлыҡты күңеленә йыйып үҫә. Ғабдулла Туҡай уның өсөн иң оло остаз була. Татар шағиры тере сағында уҡ — 1911 йылда башҡорт шиғриәтендә беренселәрҙән булып Шәйехзада уға арнап шиғыр яҙа. Ғүмер буйы башҡорт йырҙарына, ҡобайырҙарына, батырҙар тураһындағы әҫәрҙәргә һоҡланып йәшәү, уңайы тура килгән һайын уларҙы яҙып алырға тырышыу баштан уҡ уның ижадының мөһим тамырын, башҡорт фольклоры традициялары менән тығыҙ бәйләнешен билдәләй һәм уға үҙенсәлекле милли төҫ бирә.
Бабичтың башланғыс ижадынан уҡ уның киләсәк шиғриәтендә төп урын аласаҡ ике йүнәлештең — кеҫкәй уй-кисерештәрҙән яралған лириканың һәм үткер телле сатираның төп һыҙаттары асыҡ күренә.
1910 йылда Бабич тыуған ауылынан, атаһы уҡытҡан мәҙрәсәнән айырылып, Ҡаҙағстан далаларына сығып китә. Ул Кустанай яҡтарында, Турғай тирәһендәге Дүсәнбай ауылында,

Мортаза тигән ҡаҙаҡта ике йәй — 1910 һәм 1913 йылдарҙа «мүлдәкәлек итә» — балалар уҡыта.
Икһеҙ-сикһеҙ далаларҙа йәшәгән йыр-моңға бай, киң күңелле ҡаҙаҡ араһында ул замандарҙа күпме башҡорт әҙиптәре тормош юлында таяныс тапҡан. Аҡмуллалар, Буранғолдар, Ғафуриҙар, Юлтыйҙар, Йәнәбиҙәр, Ҡудаштар, Ғүмәрҙәр... Йыр-моңға ғашиҡ Шәйехзада ҡаҙаҡ сәхрәләрендә хайран шиғри донъяға килеп юлыға, аҡындарҙың әйтештәрен йотлоғоп тыңлай, кешеләрҙән ишеткән һәр бер тапҡыр һүҙҙе, оло бер байлыҡ тапҡандай, ҡыуана-ҡыуана дәфтәренә теркәп ҡуя. Шағирҙың тәүге ҡулъяҙма йыйынтығына ингән шиғырҙарҙың да байтағы ошонда яҙыла.
Ләкин күгәреп ятҡан ҡаҙаҡ далаһы ла, ундағы халыҡ ижадының байлығы ла Шәйехзаданы оҙаҡ тынысландырып тора алмай. Уның ҡайҙалыр талпыныуы, нимәгәлер болоҡһоуы бер аҙ ғына баҫылып торғандан һуң яңынан тоҡана. 1910 йылда «Зарланыу» шиғырында йәш шағир былай тип яҙа:

Буйға еткәс тә юғалттым мин ҡояшымды кинәт,
Тик был көндәрҙә түбәмдә тапҡа сумған ай йөрөй.
...Ә хәҙер күңелем минең боҙҙай туңып, таштай ҡата,
Сөнки йөрөгән ерҙәрем тик ҡап-ҡара Турғай ере.

Оло тормош юлына дәртләнеп аяҡ баҫҡан үҫмер кеше ҡояшын юғалта... Хатта уның урынына ҡалған ай ҙа тапланып, бысранып бөткән. Әле генә йәшел хәтфә кеүек ятҡан Турғай далаһы ла бөгөн килеп ҡап-ҡара төҫтә. Ун алты йәше тулмаҫ борон уҡ яҙған шиғырҙарында («Үтте ғүмеремдең хәҙер бер йөҙ ҙә туҡһан айҙары») Бабич кеше күңелендәге тетрәүҙәрҙе бер нисә юлда ни тиклем тапҡыр аса алған.
Ҡояш эҙләүсе үҫмер... Ижад юлына Бабич бына шундай ынтылыштар менән аяҡ баҫа һәм тәүге әҫәрҙәрен яҙғанда был ҡояшҡа ул бигерәк тә мохтаж була. Ләкин уның «боҙҙай туңып, таштай ҡатып» ғазапланыуҙары, ҡара һөрәмлә йылдарҙа әҙәбиәткә килгән күпселек башҡорт шағирҙарының уртаҡ һыҙланыуҙары кеүек, әле башлана ғына ине.

Кеүәш йылғаһы. Әсән ауылында Мөхәмәтзакир Бабичевтың йорто торған урын.

Река Куаш. На этом месте в деревне Асяново стоял дом Мухаметзакира Бабичева.



1895 год у муллы Мухамметзакира начался с радости: второго января в его доме родился мальчик. Этот младенец родился в рубашке. Казалось, что с первого же вздоха ребенка судьба сулила ему только счастье и радость. Этому мальчику, рожденному со знаком счастья, дали имя Шайхзада.

Счастливые мгновения в судьбе народа, его звездные часы, которые выпадают раз в столетия! Ни аул Асяново, встречавший тихий рассвет, ни покрывшиеся инеем поляны и тугаи, ни задумчивые отроги далекого Урала не знали еще, что в то благословенное утро на долю башкирской земли выпало большое счастье— родился человек, которому предстояло стать зеницей ока нации, частицей ее души, ее гордостью и жемчужиной.

Пришедшая в мир 2(15) января 1895 года эта святая душа — будущий великий башкирский поэт Шайхзада Бабич — происходил от уважаемых и благородных корней. Здесь речь не идет о зажиточности семьи, об аристократичности рода. Бабичевы всю жизнь добывали хлеб в поте лица, из поколения в поколение несли военную службу, защищая родную землю от нашествий. Много было среди них и таких, что с оружием в руках шли на врага, и тех, кто с пером и книгой несли знания людям. И как бы ни складывалась жизнь Бабичевых, они несли в своих душах свет веры и справедливости, в них горел огонь просветительства — вот яркие признаки их рода. Они — ветвь родословного дерева башкир — вотчинников дуванского рода, берущего начало в глубине поколений. Вот одна из генеалогических ветвей этого рода: Бэбес — его сын Мухтар — его сын Ишбулды — его сын Гильван — его сын Мухамметзакир — и, наконец, Шайхзада. Среди сыновей, внуков и правнуков Бэбеса были и походные есаулы, зауряд-есаулы, зауряд-сотники, походные старшины, указные муллы. Предки Мухамметзакира, с 1888 года бывшего муллой второй махалли в ауле Асяново, жили в аулах Тартыш, Кыйгазытамак, Шады.

Еще в колыбели в душу Шайхзады упали первые лучи знаний и просвещения. В многодетной и дружной семье муллы Мухамметзакира главным богатством были книги, еще до 1905 года в его дом регулярно поступали газеты. Муллу, распространявшего знания, однажды обвинили в подстрекательстве против властей и отобрали указ. И лишь когда односельчане горой встали за него, указ был возвращен.

В этом доме, озаренном светом книг, у одаренного Шайхзады очень рано проявилась тяга к творчеству. Его рукописный сборник, составленный в 1912 году и не увидевший свет, открывается стихотворением «Эй, книга!». Еще в первых произведениях молодого поэта, взявшего в руки карандаш с большим преклонением перед книгой, столкнулись свет просвещения и тень невежества.

В истории бывают удивительные совпадения. Вот одно из них: в год смерти Мифтахетдина Акмуллы родился Шайхзада Бабич. И если Акмулла с его призывом «Учиться надо, башкиры мои, учиться надо!» открыто призывал к знаниям, Бабич также пришел к творчеству, окрыляясь идеями просветительства. Он до последней капли впитывал в себя накопленные до него сокровища, он рос как личность, вбирая в свой духовной мир эти богатства. Для него самым великим наставником в поэзии с ранних лет был Габдулла Тукай. Когда татарский поэт еще был жив, Бабич в 1911 году одним из первых в башкирской поэзии посвятил ему стихотворение. Поэт, всю жизнь восхищавшийся башкирскими песнями, кубаирами, сказаниями о батырах, при каждом удобном случае старавшийся записать услышанное, в своем творчестве с самого начала прочно опирался на традиции башкирского фольклора. Этим определялся своеобразный, глубоко национальный характер его творчества.

Еще в первых произведениях Бабича ясно просматривались два направления: насыщенная острыми переживаниями и мыслями лирика и меткая сатира.

В 1910 году Бабич покидает родной аул, медресе отца и отправляется в казахские степи. В летние месяцы 1910 и 1913 гг. он живет в ауле Дусенбай близ Тургая у казаха по имени Муртаза и учит детей.

В те годы сколько башкирских писателей

нашло приют у щедрых душой, гостеприимных казахов, живших в бескрайних степях... Акмулла, Бурангул, Гафури, Юлтый, Янаби, Кудаш, Гумер... Влюбленный в песени и музыку Бабич буквально с первых дней окунается в поэтический мир, который так богат был в этих живописных местах, с наслаждением слушает поэтические состязания акынов, с радостью, словно наткнувшись на большое богатство, заносит в тетрадь остроумные слова и выражения. В первый стихотворный сборник входят многие стихи, написанные как раз в этот период.

Но ни необъятные казахские степи, ни богатство фольклора живших здесь людей не могли надолго успокоить Бабича. Порыв и стремление в неизвестность, тревога и беспокойство, отступившие на какое-то время, снова охватили его. В 1910 году в стихотворении «Жалоба» юный поэт пишет:

Возмужав, свое солнце неожиданно я потерял,
В эти дни над моей головой лишь запятнанная луна.
...Сейчас моя душа стынет как лед, грубеет как камень.
Меня кругом окружает черная тургайская земля.

(Подстрочный перевод).

Юноша, с надеждой и волнением вступивший в большую жизнь, теряет солнце... Даже луна оказывается грязной, запятнанной. Только что раскинувшаяся зеленым ковром тургайская степь сегодня предстала его глазам в мрачном черном цвете. В стихотворении, написанном Бабичем в неполных шестнадцать лет («Закатились сто девяносто месяцев моей жизни»), поэт сумел в нескольких строчках мастерски передать душевные потрясения повзрослевшего человека.

Юноша в поисках солнца... С такими устремлениями Бабич вступил на творческий путь и в пору создания своих первых произведений он особенно жаждал солнца и света. Но его боли и страдания, созвучные переживаниям многих башкирских поэтов, пришедших в литературу в мрачные годы, только начинались.



## ПРИСЯГА НАРОДУ

Звенящее золотом слово
Не ради почета пою,—
Пою для народа родного
В родном златоцветном краю.

Не золота ради сверкает
Серебряным словом перо,—
Пусть песня в народ проникает:
Ведь сердце его — серебро.

Не ради богатств садовода
Взрастил я цветник красоты,
А ради родного народа,
Чьи дочери словно цветы.

Не я сочинил свои песни,
Не я их насытил огнем,—
Народ мой горячий и честный
Их складывал в сердце своем!

Не жалуюсь на неудачу,
На холод студеных дорог,—
О доле народа я плачу,
О том, что он слаб и убог.

Пусть жертвой безвременно лягу,
Пусть юности минет пора,—
Народу принес я присягу
Из золота и серебра!



## ХАЛҠЫМ ӨСӨН

Ап-аҡ алтын йырҙарымды
Йырламыйм данлыҡ өсөн;
Йырлаймын алтын илемсөн,
Үҙ туған халҡым өсөн.

Саф көмөштәй йырҙарымды
Йырламыйм алтын өсөн;
Йырлайым тик саф көмөштәй
Саф йөрәк халҡым өсөн.

Сәскә төҫлө йырҙарымды
Йырламыйм зауҡым өсөн;
Йырлайым тик сәскәләй
Ҡыҙҙарға бай халҡым өсөн.

Дәртле ҡайнар йырҙарымды
Йырламыйм дәртем өсөн;
Йырлайым тик мәңге шат,
Дәртле, көләс халҡым өсөн.

Иламайым мин көндәрем
Һырғаҡ, һыуыҡ, һалҡын өсөн;
Илайым тик ярлы, меҫкен,
Ҡыҙғаныс халҡым өсөн.

Йәш сағым, алтын сағым,
Ялҡын сағым булһын фиҙа
Халҡым алдында минең
Биргән таҙа антым өсөн.








Әсән урта мәктәбендә шағирға таҡтаташ.

Мемориальная доска поэту в Асяновской средней школе.



Шәйехзада Бабич исемен мәңгеләштереү буйынса оҙаҡ йылдар эшләүсе Әсән урта мәктәбе уҡытыусыһы Фәнис Фатыхов.

Много лет работает по сбору материалов о Шайхзаде Бабиче учитель Асяновской средней школы Фанис Фатыхов.










Башҡортостандың Дүртөйлө районы урта мәктәбендә Шәйехзада Бабич бүлмәһе.

Мемориальная комната Шайхзады Бабича в Асяновской средней школе Дюртюлинского района Башкортостана.

Башҡорттар өсөн Әлифба.

Букварь для башкир.

Сафуан Яҡшығоловтың «Башҡорт хәлдәре» китабының тышлығы.

Обложка книги Сафуана Якшигулова «Положение башкир»



Ҡомартҡылар.

Предметы старины.



آثار

Риза Фахретдиновтың «Аҫар» китабының тышлығы.

Обложка книги Ризы Фахретдинова «Асар».



سبر تیمر یولی

Мәжит Ғафуриҙың «Себер тимер юлы» китабының тышлығы.

Обложка книги Мажита Гафури «Сибирская железная дорога».







Шағирдың тыуған яҡтарында. На родине поэта.



## ЭЙ КИТАП

Ап-асыҡ тор һәр ваҡытта, эй китап, баҡһам һиңә,
Ысын, асыл нигеҙле ерҙән күп белемдәр бир миңә!

Эй китап, мин аңраны төҙ юлға күндерһәнә,
Мине баҫҡан йәһел утын һыу һибеп һүндерһәнә.

Һин йыуатҡыс, һин уятҡыс, һин миңә ысын атам.
Булмаһаң һин, мин һине һағынып ҡына сирләп ятам.

Эй китабым, эй китап, миңә ҡыл һин хитап,
Һин генә башымдағы сүп-сарҙы алырһың утап.

## КНИГА

Открой мне, книга, навсегда сокровища свои,
Из чистых родников меня ты знаньем напои.

Скорей открой мне путь прямой среди кривых дорог,
Пожар невежества залей водой прозрачных строк!

Ты — утешение мое, ты — материнский свет.
Скорблю и мучаюсь, когда тебя со мною нет.

Будь книга, пахарем моим: мне без тебя беда —
Колосьям светлых дум грозят бурьян и лебеда.

Шағирҙың автографы.
«Эй, китап!»

Автограф поэта.







Шәйехзада төҙгән уҡыу картаһы.

Учебная карта, составленная Бабичем.

Бабичтың бер туған һеңлеләре Фәсәхәт (уңда) һәм Рафиға улы Наил менән.

Родные сестры Шайхзады Бабича: Фасахат (справа) и Рафига с сыном Наилем.

Шәйехзада Бабичтың атаһы Мөхәмәтзакир.

Отец поэта Мухаметзакир.

Дүртөйләлә Бабич урамы.

Улица Бабича в Дюртюлях.

Пристань.

Пристань.








Бөрө ҡалаһынан күренеш.  Вид города Бирска.





Мишка районы
Ҡыйғаҙытамаҡ ауылында
Бабичевтар йорто торған
урын.

На этом месте в деревне
Кигазитамак Мишкинского
района был дом Бабичевых.



Ҡыйғаҙы йылғаһы.

Река Кигазитамак.



Ҡыйғаҙытамаҡ ауылы.
Шәйехзаданың атаһы
Мөхәмәтзакир Бабичев
менән әсәһе Сажиҙә ошо
ауыл зыяратында ерләнгән.

Деревня Кигазитамак. На
здешнем кладбище
похоронены отец поэта
Мухаметзакир Бабичев
и мать Сажида.



Мишкә районы Оло Шаҙы ауылындағы Ҡалатауҙан күренеш.
Шәйехзаданың олатаһы указлы мулла Ғилуан Бабичев ошонда йәшәгән.

Вид с горы Калатау у села Большие Шады Мишкинского района.
Здесь жил дед Шайхзады указный мулла Гилван Бабичев.

Тыуған яҡ күренештәре.

Виды родной природы.





1911 йылдың көҙөндә Шәйехзада Бабич «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Тиҙ арала бөтә Рәсәй мосолмандарына танылып өлгөргән был прогрессив мәҙрәсәлә күп кенә буласаҡ яҙыусылар, телселәр, фольклорсылар, журналистар, педагогтар тәрбиәләнде. Бында татарҙар, башҡорттар менән бергә ҡаҙаҡ, үзбәк, төрөкмән, әзербайжан, ҡырғыҙ, черкес, ҡырым татары һ. б. төрлө милләт балалары бергә уҡый.

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә был уҡыу йорто башҡорт һәм татар мәҙәниәтенә байтаҡ күренекле кешеләр бирҙе. Мәжит Ғафури, Ғәлимйән Ибраһимов, Хәбибулла Ғәбитов, Ғизетдин Иҫәнбирҙин, Сәйфи Ҡудаш, Зыя Йәрмәкәй, Зыя Өммәти, Вәсим Солтанов, Ғибат Алпаров һ. б. күп кенә буласаҡ әҙиптәр, ғалимдар, журналистар һәм уҡытыусылар ошонда белем ала. Быйндағы шәхестәр араһында Шәйехзада иң танылған шәхестәрҙең береһенә әйләнә. Мәҙрәсәләге «Эләктергес», «Парлаҡ» исемле ҡулъяҙма журнал сығарыуҙа, «Милли көй, сәхнә вә әҙәбиәт түңәрәге»нең концерттарын ойоштороуҙа йор һүҙле, музыкаль һәләтле Шәйехзада һәр саҡ алдан башлап йөрөй, үҙе шиғыр һөйләй, үҙе мандолинала виртуоз уйнай, тиҙ генә таҡмаҡ сығара һалып, ҡалын тауышы менән яңғыратып йырлап та ебәрә. Уның үткер күҙе, сәсән теле мәҙрәсә эсендәге генә түгел, ҡалалағы ҡайһы бер хәлдәрҙе лә эләктереп алып, уларҙан әсе көлә. Ләкин был атаҡлы шәкерт мәҙрәсәләге буш ваҡытын уйнап-көлөп үткәрмәй. Уның һәр сәғәте иҫәпләнгән, оло маҡсаттарынан бер ҡасан да тайпылмай. Яҡты китапхана уның яратҡан урынына әйләнә. 1915 йылдан был мәҙрәсәлә уҡытҡан Ғәлимйән Ибраһимов менән яҡындан аралашыу йәш шағирҙың ижади үҫеше өсөн айырыуса әһәмиәтле була.

Эйе, ғүмеренең үтә ҡыҫҡа булырын күңеле алдан һиҙгән кеүек, Бабич яныып-талпынып йәшәй. Йәйге ял ваҡыттарында ла тыуған йортонда бер-ике көндән артыҡ тормай, әле Дүртөйлө, әле Бөрө яҡтарында халыҡ менән осрашып йөрөй, әле яңынан ҡаҙаҡ далаларына сығып китә, әле Урал тауҙарына, Яйыҡ, Һаҡмар буйҙарына, башҡорт йәйләүҙәренә юл тота. Тормошонда ла, ижадында ла шул уҡ ашҡыныу, шул уҡ ярһыу.

Талантлы Бабич, ҡанатлы Бабич... Юҡҡамыни уның мандолинаһын да ҡанатлы тип йөрөткәндәр. «Әйҙә, күңелем, бында торма, күккә, күккә, күккә ос!» — тип үрһәләнгән шағир. Ер менән күк араһында өҙгөләнеү, ғәҙелһеҙ тормош ситлегендә тонсоғоу, туҡтауһыҙ киләсәккә атлығыу — уның лирикаһындағы үҙәк кисерештәр.

Шағирҙың ижади үҫеше тигән үтә ҡатмарлы күренеш бер ҡасан да тигеҙ генә юлдан бармай. Ләкин һәр оло талантттың ижадында уның яңы биттәрен асыуы, яңы баҫҡысын билдәләүсе айырыуса әһәмиәтле әҫәрҙәре була. 1914 йылда яҙылған «Халҡым өсөн» исемле шиғыр Бабич ижадында бына шундай үҙәк әҫәрҙәрҙең береһе була. Ошо шиғыр менән Бабич шиғриәтенең ысын өлгөрөп еткән осоро башланып китә. Шағирҙың эстетик программаһын билдәләгән был әҫәрҙә ижадтың тамырҙары асыҡ күрһәтелгән. Халыҡ Бабичтың ғүмер буйы табынасаҡ иң оло мөхәббәтенә әйләнде һәм шағирҙың барлыҡ ҡалған кисерештәре ошо төп тойғо тирәһенә тупланды.

Был осорҙа Бабич ижадындағы йылдар ваҡыт теҙмәһе генә түгел, улар шағир ҡарашының киңәйеүен, ышаныстарының, инаныуының нығыныуын сағылдырған үҙенсәлекле баҫҡысты хәтерләтә. 1914 йылды шағир «Халҡым өсөн» тигән изге теләк менән башлап ебәрһә, 1915 йылда замандаштарына «Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде!» тип оран һалды, иҙелгән халҡын «Әйҙә, милләт!» тип алға саҡырҙы. 1916 йылда «Көтәм», «Кем өсөн?» кеүек билдәле шиғырҙарында Бабичтың был йүнәлеше тағы ла тормошсанвраҡ, үткерерәк төҫ алды. 1905—1907 йылдарҙағы революция тәьҫирендә иҙелгән милләттәр ер, ирек өсөн көрәшкә күтәрелде, уларҙың үҙаңы уянды. Милли үҙаңдың үҫеүе башҡорт халҡына ер мәсьәләһе менән бергә әсә телендә яҙма булдырыу, туған әҙәбиәтте үҫтереү кеүек мәҙәни-мәғрифәт мәсьәләләрен алғы планға ҡуйҙы. Рус самодержавиеһының миссионерлыҡ политикаһы һәм татар шовинистарының башҡорт халҡын инҡар итергә маташыуҙары милләттең үҫешенә аяҡ салыусы мәкерле көстәр ине. Башҡорт халҡы был йылдарҙа ошондай ике ут араһында йәшәне, шундай солғанышта ла

үҙенең йөҙөн юғалтмаҫҡа тырышып, киләсәккә юлдар эҙләне.
Башҡорт яҙмышын шул осорҙа төрлөсә юраған бәхәстәргә, туған халҡы тураһында ваҡыты менән мыҫҡыллы һүҙ көрәштереүҙәргә Шәйехзада Бабич, әлбиттә, битараф ҡала алманы, «йөк ауыр, юл болғауыр булһа ла», кешеләрҙе ошо ғынсыу тормоштан сығыу юлдарын бергәләп эҙләргә саҡырҙы.
Туған халҡына мөхәббәте, уның киләсәгенә бағлаған өмөттәре һәм ышаныстары Бабичтың 1916 йылда яҙылған «Көтәм» исемле шиғырындағы һәр юлға мөлдөрәмә тулған. Был әҫәр — Бабич ижадында ғына түгел, барлыҡ башҡорт лирикаһындағы аҫыл үрнәктәрҙең береһе.
Был шиғырҙың башҡортса яҙылыуы ла уны милли әҙәбиәтебеҙҙең үҫеш юлында үҙенсә бер тарихи факт дәрәжәһенә күтәрә. Башҡорт телен танымаҫҡа тырышыусыларҙың тауышы әленән-әле ишетелеп торған саҡта ул Бабичтың туған телдә шиғыр яҙырға һәм уны матбуғатҡа тәҡдим итергә ҡыйыулығы етте. Ул үҙенең «Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде!» тигән тормош ҡағиҙәһенә тоғро булып, туған теленә матбуғатта тулы хоҡуҡ биреү өсөн тәүгеләрҙән булып эшкә тотондо.
«Үткән көндәр» исемле шиғырында Бабич «Пәйғәмбәрҙәр нәҫеле булған менән иблестән дә уҙған әҙәмдәр» тигәйне. Уның байтаҡ әҫәрҙәрендә тигеҙһеҙ тормошто ҡәһәрләү, унан баш тартып, ҡайҙалыр ҡасырға теләү, йәшәүҙән туйыу, хыялый донъяларҙы эҙләү кеүек кисерештәр ҙә ҙур урын алды. Бабичтың ошондай тынғыһыҙ уйланыуҙарынан, һыҙылып яныуҙан тыуған шиғриәтендә башҡорт интеллигенцияһының быуат башындағы, бигерәк тә беренсе донъя һуғышы осорондағы, эҙләнеүҙәре үҙенсәлекле сағылыш тапты, һәм башҡорт романтизмының төп асылы кәүҙәләнде.
Шәйехзада Бабич тигәндән замандаштарының күҙ алдына үткер телле шиғырҙар яҙыусы, үҙе уларҙы сәхнәнән ғәжәп оҫта башҡарыусы мәшһүр көлдөргөс күҙ алдына баҫҡан. Башҡорт һәм татар донъяһында Бабич үҙ заманының иң популяр шағиры булған һәм халыҡта ул барыһынан да бигерәк сатира һәм юмор әҫәрҙәре менән шөһрәт яулаған. Бында ғәжәпләнер урын юҡ, сөнки шаян әҫәрҙәр лирикаға ҡарағанда уҡыусыларға еңелерәк тә, тиҙерәк тә барып етә һәм уларҙың аудиторияһы ла күпкә киңерәк була.
1914—1919 йылдарҙа Бабич үҙенсәлекле сатирик һәм юморист булараҡ ҙур дан ҡаҙанды, төрлө шиғырҙарын, «Ғазазил» исемле поэмаһын яттан һөйләп, Өфө, Ырымбур, Троицк, Бөрө, Темәс сәхнәләрен шаулатты, төрлө ауылдарҙа, йыйындарҙа ла кешеләр уны хайран ҡалып тыңланы. Асылда Бабич беренсе булып шиғриәтте сәхнәгә шул дәрәжәлә күтәрә алды һәм бер үҙе тотош кисә тыуҙырыр көскә әйләнде. Уның исеменең телдән телгә күсеүенең, ижадының ғәйәт популяр булыуының бер сере нәҡ шул сәхнә эшмәкәрлегенә барып тоташа.
Үҙенең йөкмәткеһе менән дә, яңғырашы буйынса ла Бабич шиғриәте өр-яңы күренеш булған кеүек, уның сәхнә эшмәкәрлеге лә быға саҡлы күрелмәгән хәл ине. Бабич шиғриәтте уҡыусыға еткереүҙә тамашасы аудиторияһының быға саҡлы беҙҙә булмаған мөмкинлектәрен оҫта файҙаланды. Бигерәк тә киләсәктә атаҡлы башҡорт йырсыһы булып таныласаҡ Ғәзиз Әлмөхәмәтов менән берлектәге концерттары ҙур уңыш ҡаҙанды. Халыҡ менән аралашыуҙа Бабич сәсәндәр традицияһын да дауам итте, уның был эҙләнеүҙәре Аҡмулла шиғриәте менән ауаздаш булды. Айырма шунда: Аҡмулла далала, сәхрәлә даһи булһа, Бабич далала ла, ҡалала ла, сәхрәлә лә, сәхнәлә лә даһи ине.
1914—1916 йылдарҙа Бабич шиғырҙары «Шура», «Ҡармаҡ» журналдарында айырыуса йыш баҫылды, башҡа газета-журналдарҙа ла донъя күрҙе. Төрлө әҙиптәрҙең көлкө әҫәрҙәренән ул «Көлкө ҡапсығы» (Өфө, 1916) тигән йыйынтыҡ әҙерләп сығарҙы. «Шөпшә», «Бәбәйчүб», «Башҡорт» һ. б. имзалар менән баҫылған әҫәрҙәре аша шағир үҙ заманының тиңдәше булмаған фельетонисы булараҡ та шөһрәт ҡаҙанды.
Шулай итеп, Өфөлә уҡыған йылдарында Шәйехзада Бабич әҙәби хәрәкәттең иң алғы сафындағы төп көстәрҙең береһе булып үҫте.

Осенью 1911 года Шайхзада Бабич становится шакирдом медресе «Галия». В этом прогрессивном медресе, широко известном среди российских мусульман, воспитывались много будущих поэтов, лингвистов, фольклористов, журналистов, педагогов. Вместе с татарами и башкирами здесь учились казахи, узбеки, туркмены, азербайджанцы, киргизы, черкесы, крымские татары и шакирды других национальностей. За короткое время это учебное заведение дало башкирской и татарской культуре много видных людей. Здесь обучались много будущих писателей, ученых, журналистов, педагогов: Мажит Гафури, Галимжан Ибрагимов, Хабибулла Габитов, Гизетдин Исянбирдин, Сайфи Кудаш, Зия Ярмаки, Зия Уммати, Васим Султанов, Гибат Алпаров и другие.

Среди шакирдов Шайхзада Бабич очень скоро стал самой заметной личностью. Он всегда был первым в выпуске рукописных журналов «Крючок», «Парлак», в организации концертов «Кружка национальных мелодий, сцены и литературы». Остроумный, музыкально одаренный Шайхзада читает стихи, виртуозно играет на мандолине и тут же импровизирует песни, поет их своим низким голосом. Очень наблюдательный, острый на язык как сэсэн, он метко высмеивает недостатки не только в медресе, но и всего города. Но ставший знаменитым этот шакирд вовсе не проводит время в медресе впустую. У него на счету был каждый час, потому что впереди была большая цель. Светлая библиотека медресе стала его любимым местом. Он близко общается с Галимжаном Ибрагимовым, который с 1915 года стал преподавать здесь и сыграл значительную роль в дальнейшем творческом развитии Бабича.

Да, Бабич жил окрыленно, самозабвенно, словно зная, что ему суждена короткая жизнь. Во время летних каникул он задерживался в родном доме не больше двух-трех дней, уезжал то в Дюртюли, то в Бирск, встречался с людьми, снова побывал в казахских степях, отправлялся в уральские горы, на берега Яика, Сакмары, на башкирские летние пастбища — яйляу. И в жизни, и в поэзии тот же порыв, та же окрыленность.

Талантливый Бабич, крылатый Бабич... Не случайно и его мандолину прозвали крылатой. «Душа моя, не оставайся здесь, взлетай ввысь, ввысь, ввысь!» — писал поэт. Преобладающие в его поэзии чувства — метания между землей и небом, страдания в несправедливом, удушливом окружении, безудержное стремление вперед, к будущему.

Такое сложное понятие, как творческий путь художника, никогда не представляет собой легкую и гладкую дорогу. Но у большого таланта рождаются произведения, определяющие этапы его роста, новые вехи его развития. Одним из таких центральных произведений Бабича является стихотворение «Моему народу», написанное в 1914 году. С этого стихотворения и началась настоящая творческая зрелость поэта. В нем особенно четко определена эстетическая программа поэта, отчетливо прослеживаются корни его творчества.

Всю свою жизнь Бабич преклонялся перед народом, который превратился в огромную его любовь, и все мысли и чувства поэта были неотделимы от этого.

Творчество Бабича этого периода — не просто вереница лет, они напоминают собой своеобразную лестницу, которая вела к расширению кругозора поэта, укреплению его убеждений. Если 1914 год поэт встретил с высоким стремлением «Ради народа!», то в 1915 он обращается к современникам с призывом «Ради счастья проведи отныне жизнь свою короткую в борьбе!». В 1916 году в известных стихотворениях «Жду», «Для кого?» устремления поэта приобретают еще большую жизненность и остроту.

В 1905—1907 гг. под влиянием первой русской революции угнетенные нации поднялись на борьбу за землю и свободу, в них пробудилось национальное самосознание. Развитие самосознания башкирского народа выдвинуло перед ним наряду с земельным вопросом проблемы создания на родном языке печати и книгоиздания, развитие родной литературы, культуры и просвещения. Миссионерская политика русского самодержавия и попытки татарских шовинистов игнорировать башкирский народ коварно препятствовали развитию

нации. В те годы башкирский народ находился как бы между двух огней, в этом окружении старался не потерять собственного лица, искал дорогу в будущее.

Шайхзада Бабич, естественно, не мог оставаться в стороне от ожесточенных споров о судьбе башкир, где порой допускались оскорбительные выпады против них. В стихотворении «Жду», написанном в 1916 году, каждая строка полна любви к родному народу, верой и надеждой в его будущее. Это произведение — одно из лучших не только в творчестве поэта, но и во всей башкирской лирике.

То, что это стихотворение написано на башкирском языке, подняло его до уровня исторического факта на пути дальнейшего развития национальной литературы. Когда еще нередко раздавались голоса тех, кто призывал не признавать самобытность, самостоятельность башкирского языка, у Бабича хватило решимости и смелости написать стихотворение на башкирском языке и предложить его в печать.

В стихотворении «Прошедшие дни» Бабич говорит, что «будучи наследниками пророка, люди в пороках обогнали самого дьявола». Во многих его произведениях большое место занимают темы проклятия мира социального неравенства, неприятия его и ухода в неизвестность, усталости от жизни, поиска фантастических миров. Подобные мучительные размышления по-своему отражали поиски башкирской интеллигенции начала века, особенно в годы первой мировой войны, и такие стихи Бабича выражали сущность башкирского романтизма.

Уже во время учебы в медресе «Галия» Бабич предстал перед современниками как остроумный поэт, мастерски читающий свои стихи со сцены. В свою эпоху Бабич был самым популярным поэтом среди башкир и татар и завоевал такую славу прежде всего своими сатирическими и юмористическими произведениями. Удивляться этому не приходится, потому что такие стихи доходят до читателя легче, чем лирика, и их аудитория намного шире.

В 1914—1919 годах Бабич снискал себе большую популярность именно как сатирик и юморист на сценах Уфы, Оренбурга, Троицка, Бирска, Темясова, в аулах, на разных праздничествах люди как завороженные слушали выступления поэта, когда он рассказывал наизусть не только стихи, но и большую поэму «Газазил». В сущности, Бабич был первым, кто в башкирской поэзии возвел исполнение стихов со сцены до уровня настоящего искусства, он мог один вести целые вечера. Имя поэта передавалось из уст в уста.

Как по своему содержанию, так и по звучанию поэзия Бабича была абсолютно новым явлением. Его сценическая деятельность также оказалась новаторством. Он сумел найти совершенно новые возможности, чтобы полнее донести поэзию до читателей. Особенно большим успехом пользовались его совместные выступления с Газизом Альмухаметовым, ставшим впоследствии знаменитым башкирским певцом. Выступая перед публикой, Бабич творчески развивал традиции сэсэнов, его поиски были созвучны также с поэзией Акмуллы. Разница в следующем: если Акмулла своими выступлениями покорял людей в степи, на селе, то Бабичу бурно рукоплескали и на селе, и в городе, и в степи, и на сцене.

В 1914—1919 годах Бабич особенно часто печатался в журналах «Шура» и «Кармак» (»Крючок»), публиковался и в других изданиях. В 1916 году Бабич выпустил подготовленный им сборник «Мешок смеха», куда включил юмористические произведения различных писателей. Прославился он также как несравненный фельетонист, публикуя свои произведения под псевдонимами «Шопша», «Бэбэйчуб», «Башкорт» и др.

Таким образом в годы учебы в Уфе стремительно росло поэтическое мастерство Бабича и он встал в ряд ведущих сил литературного движения.



Өфөлаге «Ғалиә» мәҙрәсәһе шәкерттәре.

Уфа. Шакирды медресе «Галия».

Өфөләге «Ғалиә» мәҙрәсәһе урынлашҡан бина.

В этом здании в Уфе размещалось медресе «Галия».





Шәйехзада Бабич.

Шайхзада Бабич.



Өфөләге «Ғәлиә» мәҙрәсәһе. Медресе «Галия» в Уфе.



«Ғәлиә» мәҙрәсәһе башта ошо йорттоң аҫҡы ҡатында урынлашҡан.

Медресе «Галия» сначала размещалось в подвале этого здания.



Уңда Шәйехзада Бабич.
Справа Шайхзада Бабич.

1912 йылдың яҙында Өфөгә килгәнендә Ғабдулла Туҡай «Сабах» китап магазины урынлашҡан ошо йортта туҡтаған.
В этом здании в Уфе размещался книжный магазин «Сабах», где весной 1912 года останавливался Габдулла Тукай.

Өфө. Мосолман зыяратындағы мәсет.

Уфа. Мечеть на мусульманском кладбище.





## ГАБДУЛЛА ӘФӘНДЕ ТУҠАЕВ

Донъяла бик аҙ булыр ысын, ҙур шағир Ғабдуллалай,
Ул ҡараңғы төндә яҡтыртҡан матур, аҡ тулған ай.

Ул бөйөк уй, нескә хис, тәғриздәргә бик бай, тимен,
Бар урындарҙан уның урынын ҡәҙерле, дәү, тимен.

Баҡыр эсендә көмөштәр ялтырап ятҡан кеүек,
Ап-асыҡ, ап-аҡ булып, тик аҡ күбек аҡҡан кеүек.

Күп китаптарҙың араһында уның китаптары —
Ап-асыҡ нурҙар сәсеп, күренеп тора һәр яҡтары.

Алһа, уҡыһа халыҡ шиғырын уның, иҫтә ҡала,
Һәм уның шиғыры халыҡтың күңеленә ҙур хис һала.

## ГАБДУЛЛЕ ТУКАЮ

Немного есть таких поэтов, как несравненный Габдулла.
Когда, как месяц, он сияет, ночная отступает мгла.

И нежность в нем, и гнев, и твердость, и дум глубоких мощный взлет.
Он — голос наш и наша гордость, ему — любовь, ему—почет.

Как серебро сверкает ярко в сравненьи с медною рудой,
Как пена белая в сравненьи с речной свинцовою водой,—

В сравненьи с прочими стихами его стихи, его слова
Подобны огненному свету, исполненному торжества!

Народ запоминает сразу его душевный, звонкий стих
В серцах людей он пробуждает живое пламя чувств больших!



1916 йыл Өфөлә Шәйехзада Бабич «Ҡандала» балладаһын яҙған йорт.

Дом в Уфе, где в 1916 году Шайхзада Бабич написал балладу «Клоп».



Өфөлә Хажи Рахманғолов йорто. Бында Шәйехзада Бабич 1916 йылдың йәйендә йәшәгән.

Дом Хажи Рахмангулова в Уфе, где летом 1916 года жил Шайхзада Бабич.



Һулдан уңға (беренсе рәттә): Ш. Бабич, Ғ. Әлмөхәмәтов. Икенсе рәттә: В. Хангилдин, И. Мостафин, З. Тупеев.

Слева направо (первый ряд): Ш. Бабич, Г. Альмухаметов, во втором ряду: В. Хангильдин, И. Мустафин, З. Тупеев.



**САЛАУАТ БАТЫР**

*Салауат нисә йәшендә?*
*Йәшел ҡамсат бүрке башында...*

*Халыҡ йырынан*

**Салауат ҡандай бәһлеүән!**
**Салауат ҡандай бәһлеүән!**
**Даусан, яусан бәһлеүән,**
**Еңелмәүсән бәһлеүән.**
**Салауат тиңһеҙ арыҫлан,**
**Салауат тиңһеҙ арыҫлан,**
**Арыҫландай алышҡан,**
**Уғы алған алыҫтан.**
**Салауат — Урал балаһы,**
**Салауат — йөрәк ҡәғбәһе,**
**Ерҙә әнүәр кәүҙәһе,**
**Күктә зәңгәр шәүләһе.**
**Салауат дауҙы ҡайтарған,**
**Салауат яуҙы айҡаған,**
**Ҡылысы тауҙы аҡтарған,**
**Тауышынан күл сайҡалған.**
**Салауат — йәнле шәжәғәт,**
**Салауат мәңге сәләмәт,**
**Ҡаны беҙгә аманат,**
**Килтермәбеҙ яманат!**

**САЛАВАТ БАТЫР**

*Сколько лет Салавату?*
*Зеленая шапка на его голове.*

*Из народной песни*

**Кто он, грозный Салават!**
**Чем он славен и богат!**
**Он — родной земли булат,**
**Он отвагою богат!**
**Ни во сне, ни наяву**
**Равных нет такому льву,**
**В небесах и на земле**
**Равных нет его стреле.**
**Наш Урал — его отец.**
**Он — стремленье всех сердец.**
**На земле — он свет земной,**
**В небе светится луной.**
**Он — отечества глаза,**
**Он — захватчиков гроза,**
**Саблей гору он свернет,**
**Криком озеро вспугнет.**
**Салават, как наш Урал,**
**Никогда не умирал.**
**Кровь его — завет живым,**
**Мы ее не оскверним!**





Салауат һәйкәле янында шиғыр байрамы.

Праздник поэзии у памятника Салавату Юлаеву.

Малаяҙҙа Салауат Юлаев музейы.

Музей Салавата Юлаева в селе Малоязово.



Өфөнөң Тукай урамындағы мәсет.

Мечеть по улице Тукаева в Уфе.

3—835



ХХ быуат башындағы Өфө күренештәре. Виды Уфы начала ХХ века.










Телеграфная улица
Уфа — Oufa





طورمش

«Тормош» газетаһы. Өфө.
Газета «Тормош». Уфа.









Өфө күренештәре.
Виды Уфы.















1916 йылда «Ғәлиә» мәҙрәсәһен тамамлап сыҡҡандан һуң Шәйехзада Бабич Троицкиҙа бер уҡыу йылы мөғәллимлек итә. Февраль революцияһын ул ошонда ҡаршылай, батша тәхете ҡолатылыуын, иҙелгән милләттәргә азатлыҡ килеүен тәбрикләп шиғырҙар яҙа. «Хөр милләт» исемле газета сығарыуҙа, демонстрацияларҙа ҡатнаша.
1917 йылдың авгусында «Ҡармаҡ» журналының саҡырыуы буйынса Бабич Ырымбурға килә. Башҡорт тарихындағы бик күп ҡатмарлы ваҡиғаларға шаһит булған был ҡала Бабич килгән осорҙа үҙенең әҙәби һәм мәҙәни көстәре менән башҡорт һәм татар мөхитендә Өфө, Ҡазан кеүек танылған үҙәктәрҙең береһе ине. Бында Бабичты иң ныҡ тартҡаны «Ҡармаҡ» журналы булһа ла, унда шағирға оҙаҡ эшләргә тура килмәй. Яңы тарихи ваҡиғалар бәрелешендә уның яҙмышы икенсе йүнәлешкә борола.
Батша тәхете ҡолатылыу менән Россияла милли хәрәкәт айырыуса көсәйеп китә. Был осорҙа башҡорттар араһында ла ер һәм милли азатлыҡ өсөн көрәш киң йәйелә, Башҡортостан Россияла милли көрәштең иң ныҡ ҡыҙған урындарының береһенә, Зәки Вәлиди етәкселегендәге башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте илдәге был ҡуҙғалыштарҙың иң ныҡ ойошҡан, авангардта барған көстәрҙең береһенә әйләнә. Башҡорт халҡы үҙенең быуаттар буйына яҡлап килгән изге талаптарын ҡулына ҡорал тотоп яуларға әҙер ине.
Барлыҡ Башҡортостанды — төньяҡта ғәйнә башҡорттарынан алып көньяҡта Туҡсоран яҡтарына тиклем, көнсығышта ялан ҡатайҙарҙан алып көнбайышта Һамар далаларына тиклем киң араларҙы иңләгән был милли-азатлыҡ хәрәкәтенең үҙәге Ырымбурҙа туплана. Был ҡалала ноябрь урталарында Каруанһарай яңынан ҡайтарып алына, Башҡортостан мөстәҡиллеге иғлан ителә, мәркәз Шураның фармандары халыҡҡа таратыла, башҡорт армияһын төҙөү буйынса эштәр башлана. 8—20 декабрҙә Ырымбурҙа башҡорт ҡоролтайы ҙур күтәренкелек менән үтә. Бабич был тарихи ваҡиғаларҙың үҙәгендә тора, Башҡорт мәркәз Шураһының сәркәтибе, «Башҡорт» газетаһын ойошторооусыларҙың береһе булараҡ яуаплы һәм тынғыһыҙ эштәр башҡара. 1917 йылда Шәйехзада Бабич Ырымбурҙа башҡорт йәштәренең «Тулҡын» ойошмаһын төҙөүгә күп көс һала, 18 декабрҙә ул рәсми рәүештә иғлан ителә. Бабич ҡулы менән яҙылған декларацияла ойошманың башҡарма ағзалары йәштәргә «Йәшәтегеҙ «Тулҡын»ды һәм тулҡынландырығыҙ башҡорт донъяһын» тигән саҡырыу менән өндәшә. Был ойошма хәҙерге башҡорт телендә китаптар сығарыу юлында мөһим аҙымдар яһаны. Шәйехзада Бабичтың «Йәш Башҡортостан. Зәңгәр йырҙар» исемле тәүге йыйынтығы бына шундай эшмәкәрлектең һөҙөмтәһендә 1918 йылда Ырымбурҙа донъя күрҙе.
Бабичҡа үҙенең ҡыҫҡа ғына ғүмерендә байтаҡ эҙләнеүҙәр һәм һынауҙар юлы үтергә, ҡаршылыҡтарҙы еңергә тура килә. Әммә башҡорт халҡының милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыу уның өсөн иң ҙур һынау булды. Һәм был һынауҙа шағир бер генә мәлгә лә һынатманы.
1917 йылда ойошҡан башҡорт милли хәрәкәтенең тамырҙары быуаттар дауамынан килгән күтәрелештәргә барып тоташа һәм уларҙың барыһының төп талабы — ер мәсьәләһе, Башҡортостандың азатлығы мәсьәләһе ине. Ерҙәрҙе талау, милли иҙеү Бабич күңеленә әсә һөтө, сәңгелдәк йыры менән һеңешкән аяныс хәҡиҡәт ине. 1905—1907 йылдарҙа Бөрө төбәгендәге ер өсөн ҡанлы болаларға шағир туранан-тура шаһит була, һәм был тетрәткес хәлдәр уның донъяға яңы асылып килгән зиһенендә юйылмаҫ эҙ ҡалдыра. 1917 йылда ер мәсьәләһе ҡабырғаһы менән ҡуйылған саҡта Бабичта был тема бигерәк тә көслө яңғыраны. Ерһеҙ азатлыҡ юҡ. Ерһеҙ азатлыҡ булмаған кеүек, тигеҙлек, ирек тураһында уйланыуҙарҙың ер образына килеп тоташыуы тәбиғи ине. «Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ, бүтәнсә юҡ сарабыҙ», — ер тураһында шалтырауыҡ һүҙҙәр ҡысҡырмайынса, шағир бына шулай асыҡ итеп әйтте. Ер тураһында уйланғанда, ул ошо хаҡта башҡорт фольклорында үҫтерелә килгән уйҙарҙы дауам итте.
Милләттең йәшәү нигеҙе — ошо ғәзиз ерҙе яҡлап ҡалыу өсөн көрәштә шағир Бабичтың иңенә яугирлыҡ бурысы ла өҫтәлде һәм ҡанлы яуҙарҙа, утлы алыштарҙа ул ауыр юлдар үтә, бик күпте кисерә. Шағир һәм яугир булыу

беҙҙең халыҡта бик борондан килә, һәр хәлдә беҙ белгәне Салауаттарҙан алып Мостай Кәримдәргә килеп етә. Башҡорттоң бөйөк улы Зәки Вәлиди ҙә ғалим һәм яугир. Бәбес уғландары өсөн иһә яугирлыҡ үҙенсә ырыу тамғаһы, илкәйе өсөн Париждарға барып еткән Илекәйҙәрҙән — Бәбес ейәне, Мөхтәр уғлы Илекәйҙәрҙән килгән йола ине.

Бабичтың шағирлығы хоҙай тарафынан бирелһә, яугирлығы заруратTан килгән. Туған милләте азатлыҡ өсөн изге көрәшкә күтәрелгәндә Бабич шиғырҙары кешеләрҙе рухландырыусы оран булды. «Сәсәнмен тип кем әйтмәҫ, яу килгәндә өнө юҡ» — тигәндәр борон. Милли күтәрелеш ваҡытында Бабич үҙендә тағы ла ҙурыраҡ яуаплылыҡ тойҙо, дәһшәтле ваҡиғалар уның өсөн һынау ғына түгел, ҡәләмен үткерләүсе сар ҙа булды. «Йәш Башҡортостан» китабына «Ҡурайҡайға», «Башҡортостан», «Салауат батыр», «Көтмәҫтән» кеүек һәр юлынан тыуған ер рухы бөркөп торған шиғырҙар тупланғайны.

1917—1918 йылдарҙа Бабич шиғриәтендә юмор бөтөнләй осрамай тиерлек. Фәжиғәле, дәһшәтле осорҙа шағир уйҙары ла күберәк хафалы ине.

«Йәш Башҡортостан» китабына ингән «Башҡортостан мөхтәриәтенә ҡаршы татарға», «Список № 9», «Казан платформаһы мөридтәренә махсус» исемле шиғырҙар оҙаҡ йылдар буйы Бабичҡа милләтсе мөһөрөн һуғыр өсөн уйлап сығарылған сәбәптәрҙең береһе булып килде. Ләкин «Башҡортостан мөхтәриәтенә ҡаршы татарға» тигәндән шиғыр барлыҡ татар халҡын күҙ уңында тотманы, әлбиттә. Татар әҙәбиәтендә, бигерәк тә бөйөк Туҡайға сабый саҡтан уҡ ҡайнар һөйөү һаҡлаған Бабичтың татар халҡына ниндәйҙер нәфрәт йәки үс тотоуы һис тә мөмкин түгел ине. Шағир башҡорт халҡының тиң хоҡуҡлығын танымаусы сәйәси төркөмдәр менән бәхәскә инде, Башҡортостандың үҙаллылығын яҡланы. Башҡорт шиғриәтендә Башҡортостан образы Башҡортостан исеме менән тәү башлап Шәйехзада Бабич шиғырҙарында кәүҙәләнде. Әлбиттә, ут эсендә йөрөгәндә шағир гел генә «Башҡортостан — гөлбостан» тип кенә йөрөмәгәндер. Шулай ҙа уның һыҡтанған саҡтары был осорҙағы шиғырҙарында байтаҡ күренһә лә, маҡсаттарына шикләнеп ҡараған, юлдан тайпылған саҡтары юҡ. Иң ауыр саҡтарҙа ла ул кешеләргә йылы һүҙ таба белде, киләсәккә өмөт уятырға тырышты.

Күпме йәһәннәмдәр аша үткән башҡорт ғәскәрҙәре 1919 йылдың 18 февралендә ҡыҙылдар яғына сыҡты. Ошо ваҡытта Бабич «Большевиктар менән килешеү туралы башҡорт халҡына көйлө хитап» тигән оҙон шиғри өндәмәһен яҙҙы. Әҫәр листовка рәүешендә баҫылып, ғәскәрҙәргә, ауылдарға таратылды. Был хитап шул осорҙағы сәйәси хәлдәрҙе аңлатыу менән бергә башҡорт азатлыҡ хәрәкәтенең борондан килгән тамырҙарын барлау һәм милләттең бөгөнгө көрәш дәртен данлау яғынан да («Юҡ, һатманы башҡорт иҫке исемен, атылып килеп сыҡты майҙанға») бик әһәмиәтле. Уйлап ҡараһаң, Бабичтың барлыҡ ижады — туған халҡына моңло хитап ул.

Башҡорт республикаһы Ваҡытлы хәрби-революцион Комитетының 1919 йыл 25 февраль приказы менән Бабич Башревкомдың башҡорт матбуғатында эшкә тәғәйенләнгәйне. Ләкин шағирға был эштә оҙаҡ эшләргә насип булманы. Фронттың бер яғынан икенсе яғына сығып ҡына яугирҙар тыныс тормош таба алманы. Аҡтар йәһәннәменән ҡотолдом тигәндә, башҡортҡа яңы тамуҡтың уты үрләй, ҡыҙылдарҙың суҡмары киҙәнә башланы. Граждандар һуғышы осоронда Башҡортостанды бер яҡтан — аҡтар, икенсе яҡтан ҡыҙылдар таланы. Бабич бына ошо тамуҡ эсендә һәләк булды. 1919 йылдың 24 мартында Бабич Башҡорт хөкүмәтенең архивын һәм типографияны теййәп, бер төркөм һыбайлы менән Темәстән Ҡыҙыл Мәсеткә (Мораҡҡа) юлға сыға. Юлда ул күҙҙе ҡамаштырып, яҙғы ҡояшта ялтырап ятҡан Уралға һоҡланып: «Мин был яҡтарға тағы киләм әле. Ошо урмандар шаулап япраҡ ярғанда, Һаҡмар буйының муйылдары шаулап сәскә атҡанда киләм. Ул саҡта Урал хаҡында ҙур шиғыр тыуасаҡ!» — тип, хыялдарын һөйләп килә.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Урал хаҡындағы ул шиғыр яҙылмай ҡалды. Шәйехзада Бабич һәм уның юлдаштары Преображенскийға (Йылайыр) етеү менән ҡулға алынды һәм башҡорт ҡанын көҫәгән йыртҡыс ҡыҙыл командирҙар тарафынан йөҙәрләгән башҡорт ирҙәре менән бергә милләтебеҙҙең бөйөк шағиры Йылайырҙың таш майҙанында вәхшиҙәрсә яҙалап үлтерелде.

В 1916-м году после окончания медресе «Галия» Шайхзада Бабич год учительствовал в Троицке. Здесь же он встретил Февральскую революцию, написал восторженные стихи о свободе, которую принесло угнетенным народам свержение царя, выпускал газету «Хор миллят» («Вольная нация»), участвовал в демонстрациях.

В августе 1917 года по приглашению журнала «Кармак» поэт приехал в Оренбург. Этот город, свидетель многих сложных событий в истории башкир, в момент приезда Бабича был одним из признанных и культурных центров башкир и татар наряду с Уфой и Казанью. И хотя сюда притягивал Бабича прежде всего журнал «Кармак», проработал он в редакции недолго. Столкновения новых исторических событий повернули судьбу поэта.

